


# Оҫталыҡ дәресе

Баһауетдинова Альмира Рафаиловна

Архангель районы



# Әҙәбиәт дәрестәрендә тәнҡитле фекерләү технологияһы алымдарын ҡулланыу



# Тәнкитле фекерләүҙе үҫтереү кимәле

- 1 – се кимәл – саҡырыу, өндәү
- 2 – се кимәл – уйлау, фекерләү
- 3 – сө кимәл – рефлексия стадияһы



# Тәнҡитле фекерләү технологияһының синквейн алымының диамант төрө

# Билдәләмә

Диамант - билдәле бер ҡағиҙә буйынса шиғри формала яҙылып, ете юлдан торған ҡыҫҡа әҙәби әҫәр.

Диамант ярҙамында беренсе һәм етенсе юлдарҙағы ике ҡапма-ҡаршы төшөнсә (исем) араһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы билдәләргә мөмкин.

# Маҡсаттар:



- һүҙ байлығын арттыра.
- Йөкмәтке һөйләүгә әҙерләй.
- Төп фекерҙе билдәләргә өйрәтә.
- һине ижадсы итеп хис иттерә.



д и а м а н т

# диамант яҙыу ҡағиҙәһе

1 юл -  теманы асыҡлаусы бер исем.

2 юл -  предметты баһалаусы ике сифат.

3 юл -  предметҡа хас булған өс ҡылым.

4 юл -  һығымта, теманың төп фекерен ҡабатлаусы дүрт ассоциация (исем).

5 юл -  икенсе исемгә хас булған өс ҡылым.

6 юл – икенсе исемгә хас булған ике сифат.

7 юл –тәүге юлдағы исемгә ҡапма-ҡаршы бер исем (антоним).




**Яҙ.**

**Яҡты, йәмле.**

**Йәмләй, уята, үҫтерә.**

**Тормош, йылылыҡ, йәшеллек, мөхәббәт.**

**Һыуыта, ҡарайта, һәләк итә.**

**Ҡоро, күңелһеҙ.**

**Көҙ.**





Һөнәрсе.

Саф күңелле, эшһөйәр.

Эшләй, ярҙам итә, шатландыра.

Ижад, хеҙмәт, оҫталыҡ, изгелек.

Урлай, алдай, һата.

Мәкерле, хәйләкәр.

Өйрәнсек.







## Йәшлек.

Дәртле, матур.

Сәскә ата, йәнләндерә, әйҙәй.

Дәрт, сәм, ынтылыш, тормош.

Уйландыра, борсолдора, һағайта.

Күңелһеҙ, бәхетһеҙ.

## Картлыҡ.





# Образға характеристика биргəндə ҡулланыу





**Хəмит.**

**Егəрле, эшһөйəр.**

**Эшлəй, төҙөй, матурлай.**

**Изгелек, яҡшылыҡ, хеҙмəт, хөрмəт.**

**Йоҡлай, хыяллана, тик ята.**

**Ялҡау, ҡурҡаҡ.**

**Вəлит.**







# Йомғаҡлау



- Уҡыусылар үҙ аллы эшкә өйрәнә;
- Уҡыусыларҙың ижади һәләте үҫә;
- Уҡыусыларҙың тәнҡитле фекерләүе үҫә;
- Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығы арта, бәйләнешле, дөрөҫ һөйләргә өйрәнә;
- Йомғаҡ яһарға, фекерҙәрен, ҡараштарын йыйнап, ҡыҫҡа итеп әйтергә, үҙенең эшмәкәрлегенә баһа бирергә өйрәнә.

